*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# Гөлдәр, Гөлдәр, Гөлдәр...



*Мин унын менән сирек быуат таныш. Уй-кисереуштәрен, эшмәкәрлеген, йыуаныс-кыуаныстарын белеп йәшәйем. Хәзер ул Башкортостан мәзәниәт министрынын беренсе урынбасары. Гөлдәр Сабит кызы Моратова...*

Гөлдәр менән тәүге осрашыу осраҡлы ғына килеп сыҡты. 1978 йыл. Учалы ҡалаһында әҙәби берекмә ойоштороп, мәж килеп эшләп йөрөйбөҙ. Күмәк кенәбеҙ. Ауылдарға сығабыҙ, халыҡ менән осрашыуҙар уҙғарабыҙ. Шулай бер Сәфәр ауылына юлланырға торғанда арабыҙҙа йырсы, гармунсы булмай сыҡты. Ары иттек, бире иттек. Йырһыҙ-көйһөҙ осрашыу майһыҙ бутҡа кеүегерәк була бит. Ә бутҡаның шарты — май. Шунда миңә кемдер: «Учалы ауылындағы музыка мәктәбендә уҡытыусы бар. Үҙе йырлай, баянда ла уйнай», — тине.

Зәңгәр күҙле, һомғол буйлы, теремек йәш ҡатынды күргәс, аптырабыраҡ ҡалдым: ҡайҙалыр күргәнем бар. Сәфәргә ҡайҙан, ҡасан китеребеҙҙе әйттем. Гөлдәр артыҡ хафаланманы. «Борсолмағыҙ, ваҡытында барып етермен!» — тине.

Осрашыу башланыр алдынан ғына килеп етте Гөлдәр. Шунда ҡылт итеп иҫемә төштө: ул бит Өфө сәнғәт училищеһының хор-дирижер бүлегендә уҡый ине! Бер ятаҡта йәшәнек, әйе-әйе...

Әлеге осрашыуҙа Гөлдәр беҙҙең берекмә ағзалары һүҙҙәренә Рәмил Ғимранов, Ғәзиз Дәүләтбирҙин яҙған йырҙарҙы башҡарҙы, осрашыу тамамланғас: « Апай, әйҙә минең машинаға ултыр, балаларың менән шулай йәтеш булыр», — тине.

Ҡалаға ингәс, үҙҙәренә алып ҡайтты. Ул сәй ҡуйған арала китап кәштәләрен ҡараштырам. Китаптың күплеге! Ниндәй генә авторҙар юҡ! Ире кем икән һуң был ҡатындың?

Аҙаҡ уның тормош юлдашының бөтә ҡала халҡы ихтирам иткән врач-невропатолог Данис Хәйрулла улы Йосопов икәнен белдем. Врач менән музыка белгесе лә шул тиклем әҙәбиәт менән мауығыр икән?..

Ошо осрашыуҙан алып Гөлдәр беҙҙең әҙәби берекмәнең айырылмаҫ дуҫына, кәңәшсеһенә һәм рухташына әйләнде.

Күп тә үтмәй, Гөлдәр Сабит ҡыҙын Учалы район советының мәҙәниәт бүлеге мөдире итеп эшкә саҡырҙылар. Гөлдәргә үҙенән алда эшләгәндәрҙең «мираҫын» алып китеү еңелдән булманы, әлбиттә. Уйҙырма һандар, ҡабартылған отчеттар... Яңы мөдир эште үҙешмәкәр түңәрәктәр эшен йәнләндереүҙән башланы. Үҙен белә-белгәндән халыҡ араһында йәшәгән, ауыл ҡатындарының йыр-моңдарын күкрәгенә һеңдереп, улар менән бергә бәпкәһен дә көткән, ырҙын табағында ла эшләгән,

бесән дә сапҡан, көтөү ҙә көткән, гармунын да тартҡан ҡыҙ халыҡ күңелендә күпме ижад гәүһәрҙәре ятҡанын яҡшы төшөнгәндер. Гөлдәр был йылдарҙа ал-ял белмәй сапты: уның «Нива» машинаһын тәүлектең егерме дүрт сәғәтендә Учалы районының егерме дүрт ауылында күрһәң дә ғәжәпләнерлек түгел ине. Ошонда туғыҙ йыл эшләү дәүерендә районның үҙешмәкәр коллективы алты тапҡыр халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнашты һәм республикала бөтә жанрҙар буйынса ла алдынғылар рәтендә булды. Ошо йылдарҙа халыҡ ижадын тергеҙеү ысынлап та Учалы районынан башланғандыр. Һәр ауылда тиерлек «Серҙәштәр» клубтары ойошторолдо, «Ҡарға бутҡаһы», «Әбейҙәр сыуағы» байрамдары гөрләп үтте, ижади берекмәләр эшен йәнләндерҙе, «Уралым» фольклор коллективы, республикала еңеүсе булып, автобус менән бүләкләнде. Халыҡ уянды, ҡуҙғалды. Учалы ауылындағы мәҙәниәт йортона капиталь ремонт үткәрелде, ошонда уҡ типовой проект менән китапхана бинаһы сафҡа индерелде. Әммә үҙешмәкәр түңәрәктәр менән етәкселек итеү өсөн белгестәр етмәү бәкәлгә һуға торҙо. Хәтеремдә, теге йәки был сара үткәндән һуң, эшләгәндәргә анализ, киләсәккә пландар ҡороп, йыш ҡына Гөлдәрҙең «Жигули»-һында төндәрен икәүҙән-икәү ҡалып һөйләшеп ултырыр инек. Көндөҙ ваҡыт юҡ: һәр көнө түгел, сәғәте-минуты бүлгеләнгән.

Шулай ҙа, Гөлдәр Сабит ҡыҙының шәхесе тураһында уйланһам, уның иң ныҡ бүлгеләнеүе ғаилә, эш һәм дуҫтары араһында булғандыр. Ярай әле ире Данис Хәйрулла улы яйына ҡуйҙы. Районда ғына түгел, бәлки республикала энә менән дауалау ысулын тәү башлап үҙләштергән кеше баш-аяғы менән үҙ эшенә сумды. Ҡайтһа — китаптар. Баш балалары Денис мәктәпкә уҡырға төштө, ә Морат — әсәһе янында. Репетициялар ваҡытында ултырған килеш йоҡлап та китә малай. Әлдә Гөлдәр уны күберәк үҙе менән алып йөрөнө, юғиһә бала әсәһен күрмәй үҫер ине. Ә дуҫтары Гөлдәрҙең һәр саҡ күп булды. Тартҡан атты егәләр, ти бит. Беҙ, төрлө характерлы, төрлө йүнәлештәге ижад кешеләре, бөтәбеҙ ҙә ниңәлер йылы һүҙҙе лә, ярҙамды ла Гөлдәрҙән көттөк.

Хәтеремдә, минең тыуған ауыл Күсейҙән телеграмма килеп төштө: «Мәҙәниәт йорто асабыҙ. Килеп етегеҙ». Ул саҡта беҙ Учалы музыка училищеһының үҙебеҙ юллап астырған һәм эште дәррәү алып китер өсөн Гөлдәрҙе мөдир итеп ҡуйған фольклор бүлегендә эшләп йөрөй инек. Иртән иртүк торҙом да училищеға киттем. Дәрес башланырға иртә әле. Ҡыш. Көнсығыш әре-һәре лә яҡтыра башламаған. Коридорға индем. Уҡытыусылар бүлмәһенән (эште беҙ дөйөм ятаҡтың өс кенә бүлмәһендә башланыҡ) үҙәкте өҙөрлөк моң ишетелә. «Еҫлегөл» көйө. Ошо исемдәге хикәйә лә яҙғайным заманында. Моңдо өҙөргә ҡыймай, инмәй торам, әммә ул туҡтамай. Моң берсә күңелемде һағышҡа һала, берсә бөтә булмышымды аллы-гөллө офоҡтарға күтәрә. Барып индем.

— Бик иртәләгәнһегеҙ... — Гөлдәр, баянын ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәй, ҡаушағандай, әйтерһең, уның йөрәк серҙәре яҙылған хатты уҡығандар.

— Ауылға саҡырғандар. Бөгөн клуб асыла. Күсейҙә. — Гөлдәр минең ҡаушауҙы шундуҡ аңланы. — 300 саҡырым ара, ҡышҡы юл. Тантана киске 7-лә башлана.

— Ярар, коллективты алабыҙ ҙа китәбеҙ. Апай, һеҙ район советына йүгерегеҙ. Машина бирһәләр, ҡалғаны!..

Сығып киттек. Тыуған ауылымдың Мәҙәниәт йорто стеналары Учалыла тыуып-үҫкән йырсыларҙың, Рәмил Ғимрановтың, Фәрзәнә Фәтҡуллинаның, Гөлдәрҙең моңдарын, Майза Бүләкованың тыпыр-тыпыр бейегәнен, Сәлимйән Бәҙретдиновтың әҫәрләнеп шиғыр уҡығандарын һаҡлай, иҫләй торғандыр...

Учалы музыка училищеһында фольклор бүлеге асылыуға фатиха алғас, кемде етәксе итеп ҡуйырға тигән һорау тыуҙы. Эште баштан ырамлы алып китмәгәндә, караптың ҡомға төртөлөүе бар. Етмәһә, был Гөлдәр Сабит ҡыҙының дә зәңгәр хыялы ине. Ҡарыулашманы. Килде. 1991 йылдың 1 сентябрендә тәүге ҡарлуғастарыбыҙ уҡый башланы. Ул саҡта мин «Яйыҡ» гәзитендә эшләй инем. Бер көн кис улы Морат менән Гөлдәр өйгә килеп инде. Мине училищеға «ҡоҙаларға» килгән булып сыҡты ул. Был «ҡоҙалау» иртәнге сәғәт дүрткә тиклем дауам итте, һәм, әлбиттә, баш ҡоҙаларҙың еңеүе менән тамамланды. Дүрт йыл Гөлдәр Сабит ҡыҙы менән етәкләшеп йөрөп эшләү бәхете тейҙе миңә. Бәхете тим. Сөнки был йылдар эсендә, үҙенә ни тиклем ауырға тура килгәндә лә, мин уның бер тапҡыр ҙа кемгәлер ҡысҡырғанын ишетмәнем, үҙенә тоҙаҡ ҡорған кешеләрҙе лә ул дөйөм эш хаҡына хуш күңел менән ғәфү итә белде, үс һаҡламаны, кенә ҡыуманы. Күпме бергә эшләгән

иптәштәренең торлаҡ мәсьәләһен хәл итте, абруйлы исемдәр алып биреште, ғаилә проблемаларын үҙ иңенә алды. Ошо осорҙа дөйөм ятаҡтың бая әйткәнемсә бәләкәй генә өс бүлмәһендә эш башлаған бүлек, «Төҙөүселәр» клубына реконструкция үткәреп, яңы базала төпләнде. Бүлек асылыуҙың тәүге айҙарында 12-шәр комплектлы 4 төрлө милли костюм тектерелде; бүлек Майза Бүләкова, Зөлхизә һәм Ринат Ҡолбәйетовтар, Фәрзәнә Фәтҡуллина, Рәмил Ғимранов, Айбулат Рәхмәтуллин, Фәрит Зәйнуллин кеүек сәнғәт йондоҙҙары булған кадрҙар менән нығытылды; ошо осорҙа бүлектең «Ҡойон» бейеү ансамбле «Халыҡ ансамбле» исемен алды, уның етәксеһе Зөлхизә Ҡолбәйетова урындағы Муса Мортазин исемендәге премияға лайыҡ булды; ансамбль даны үҫте, республика кимәлендәге яуаплы концерттарҙа, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында сығыш яһаны, Учалы ҡалаһында уҙғарылған республика фольклор фестивалдәрендә беренсе урынды яуланы. Гөлдәр Сабит ҡыҙын Мәҙәниәт министрлығына эшкә күсергәс тә ошо талпыныу, юғары осош үҙенекен итте: яңыраҡ Гөлдәр Сабит ҡыҙы үҙенең йөрәк көсө менән башлап ебәргән коллективы менән Испанияға барып ҡайтты...

Әлбиттә, фольклор бүлеген башлап астырыусылар ҙа, уның тәүге уҡытыусылары ла йән-яҡҡа таралып бөттө. Әммә ошонда эшләгән йылдар һәр ҡайныбыҙҙың күңелендә яҡты нур, аяҙ бер иртә булып ҡалды. Ошонда эшләгән саҡта Гөлдәрҙең ҡырҡ йәшен билдәләнек.

Композитор Рәмил Ғимранов минең класҡа килеп инде, үҙе йылмая:

— Гөлдәр Сабитовнаға ниндәй бүләк әҙерләйбеҙ, Хизбулловна?

Уйлана төштөм. Ябай ҡатын түгел. Эш тигәндә, халҡы, дуҫтары тигәндә кәрәк булһа аҫау айғырҙарҙы ауыҙлыҡлар, кәрәк булһа, утҡа ла, һыуға ла инер тынғыһыҙ ҡатынға ниндәй бүләк йәтеш булыр? Уйланыуым оҙаҡҡараҡ һуҙылды микән, Рәмил үҙе телгә килде:

— Әйҙә, Хизбулловна, һеҙ һүҙҙәрен яҙығыҙ, мин көй яҙырмын.

Бурай-бурай ҡарҙар яуған саҡта килде миңә һүҙҙәр:

Көндәремдә ҡояш һүнһә әгәр,
Күкте ярһа утлы йәшендәр,
Һиндә генә, Гөлдәр, һинең йөрәгеңдә
Уттан ҡурсалаусы ышыҡ бар.
Гөлдәр, Гөлдәр, Гөлдәр,
Уттан ҡурсалаусы
Изге төйәк һинең йөрәгең.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратованың Өфөлә мәҙәниәт министрының урынбаҫары сифатында эш башлаған көндәре Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылыуға тура килде. Башлыса, унда Башҡортостандың район һәм ҡалаларынан килгән үҙешмәкәр түңәрәк коллективтары йыйылды. Мең ярым кеше! Шуларҙың барыһын туплап, бер тын алғанда ҡарарлыҡ итеп ойошторорға кәрәк. Ҡоролтайҙы асыу сәғәте етте. Район, ҡалаларҙан килгән делегаттар рәт-рәт булып Ижтимағи үҙәк бинаһына эркелә. Башҡортостан гимны яңғырай. Делегаттарҙы ҡаршы алған ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында үҙебеҙҙең Учалылағы фольклор бүлеге талиптарын күреү түбәне күккә күтәрә, бер юлы Гөлдәр өсөн ғорурлыҡ уяна күңелдә: бына ул сәскән орлоҡтар, шытым ебәреп кенә ҡалмай, сәскә атҡандар! Ҡоролтайҙа Гөлдәр делегат булараҡ та ҡатнашҡайны, урыҡһурыҡ ҡына күренеп ҡалды, ваҡыты тығыҙ. Мәгәр ул тотонған эштең бер кемдең дә йөҙөн ҡыҙартмауына иманым камил ине, Учалыла ул бит байрамдарҙы кешеләрҙе генә түгел, майҙандарҙа аттарҙы бейетеп ҡуйып үткәргән кеше әле!

Гөлдәр киткәс, Учалы етемһерәп ҡалды. Киткән кеше өмөт-хыял ҡанатында оса, ҡалғанға ҡыйын, тиҙәр бит. Оҙаҡламай беҙ ҙә, уның рухташтары, төрлөбөҙ төрлө яҡҡа таралды. Әйтерһең дә бал күсе: инәһе ояһын ташлаһа, күс тырым-тырағай килә. Учалы юғалтһа ла, республика отто. Туҡтауһыҙ урғылған шишмә кеүек, мәҙәни саралар үткәреүҙән тынып торған саҡтары булмаған ойошма күптән шулай Гөлдәр Сабит ҡыҙы кеүек егәрле, белемле, үткер һәм сая белгескә мохтажлыҡ кисермәне микән? Бер уйлаһаң, Гөлдәр Моратоваға яңы эштең айышына төшөнөргә махсус ваҡыт та кәрәк булмағандыр. Китапхана, мәҙәниәт учреждениелары, үҙешмәкәр сәнғәт, уҡыу йорттары — уларҙың барыһының да тын алышын күптән белә ине бит ул. Миңә бер-нисә йыл элек Гөлдәр менән Темәс ауылының мәҙәниәт учреждениеларында бергә йөрөргә тура килде. Сибайҙа ла уның менән училище, театр биналарына ингән саҡтар булды. Мин шуға иғтибар иттем: етәкселәр нужалары хаҡында ауыҙ асып әйтергә өлгөрмәй ҡала — уларҙың иң «ауыртҡан» ерен Гөлдәр алдан әйтеп өлгөрә һәм иң мөһимен әйтә. Бындағы хәлде аңлау өсөн бер ҡараш ташлап алыу етә уға.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова мәҙәниәт министрлығына эшкә килгән саҡтарҙа Бөтә

донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙары нигеҙендә «1996-2000 йылдарҙа Башҡортостанда мәҙәниәтте үҫтереү программаһы» төҙөлә. Ниндәй генә мәҙәни саралар ойоштороһаң да, ил үҙәгенең ныҡлығы унда йәшәгән халыҡтарҙың күңел көрлөгөнә, рухи байлығына тоташа. Ошо юҫыҡта эш алып барыр өсөн, һуңғы йылдарҙа ғына республиканың район-ҡалаларында, төбәктәрендә күп милләтле Башҡортостандың мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп күпме фестивалдәр, тамашалар үткәрелә!

Гөлдәр үҙе хаҡында һөйләп бармай. Әңгәмәләшкән саҡта ла ул эшләгән эштәре хаҡында һөйләүҙән бигерәк киләсәк хаҡында борсолоуҙары менән уртаҡлашты:

— Эшләгәс, өлгөрөргә тырышаһың инде ул. Тик бына йәш кадрҙар үҫтереү өҫтөндә уйларға кәрәк. Республикала мәҙәниәт буйынса белгестәр әҙерләү өсөн уҡыу йорттары етешмәй. Стәрлетамаҡ ҡалаһында бер генә мәҙәниәт техникумы бар. Республикала эшләгән 8541 мәҙәниәт хеҙмәткәренең бары 3042-һе генә махсус белемле. Ҡайһылай ғына булһа ла, республикабыҙға мәҙәниәт институты кәрәк. Силәбеләге институт беҙҙең кадрҙарға булған ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмай...

Өлгөргән проблема. Башҡортостан бит республиканың эсендә йәшәгән генә түгел, ә сит өлкәләрҙә ҡалған ҡан-ҡәрҙәштәренең дә мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү миссияһын алып бара. Арғаяшы ла, Ҡурғаны ла, Ырымбуры ла, Перме лә, Һамар яғы ла беҙгә ҡарап тора. Беҙ көрһөнһәк — улар уфтана башлай, беҙ шатланһаҡ — улар ҡыуана.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы, министрлыҡта эшләй башлағас, «түбән»дән саҡырылған кадр булараҡ, эште министрлыҡ менән районлар, ҡала һәм ауыл китапханалары, ундағы үҙешмәкәр түңәрәктәр менән бәйләнеште нығытыуҙан башлай, сөнки, үҙәктән финанслау булмағас, үҙгәртеп ҡороуҙар замаында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡаушап ҡалды, эш һүлпәнәйҙе, һүнде. Үҙәк менән бәйләнеш һүлпәнәйеүҙең бәләһен үҙ елкәһендә татыған етәксе булараҡ, Гөлдәр Сабит ҡыҙы урындарҙағы кадрҙар менән конкурстар, семинарҙар, фестивалдәр үткәреүгә, методик ярҙам күрһәтеүгә ҙур иғтибар бирә. Ошо осорҙа халыҡ коллективтарының эше йәнләнә, уларҙың һаны 75-кә генә тороп ҡалғандан 225-кә күтәрелә.

Икенсе яҡтан, бәйләнеш Мәскәү менән дә хөртәйгән. Гөлдәр Моратова үҙенең элекке эш тәжрибәһенән яҡшы белә: ул район советына эшкә килгәндә мәҙәниәт усаҡтарында эшләгәндәрҙең береһенең дә юғары махсус белеме булмай. Тиҙ арала Силәбе культура институтына 7 кешене уҡырға ебәреп хәлде яҡшырта ул. Был юлы ла эште шунан башлай. Мәскәүҙең Мәҙәниәт университетына 32 хореограф ебәрелә. Унан тыш, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең норматив-хоҡуҡ базаһы нығытыла, «Мәҙәниәт хаҡында закон»ға үҙгәреш индерелә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре оҙаҡ йылдар эшләгән өсөн өҫтәмә эш хаҡы алыуға өлгәшә. «Бөтә был сараларҙы, — ти Гөлдәр Сабит ҡыҙы, — министрлыҡта эшләгән коллегаларым менән бер һүҙле, бер уйлы, бер төптән булып башҡарып сыҡтыҡ. Әлбиттә, республикабыҙҙың үҙаллылығы булмаһа, беҙ бер ни эшләй алмаҫ инек. Хәтерләйем, Учалыла эшләгәндә «Ләйсән» ансамбленә төлкө кәпәстәр тектереү өсөн дә Мәскәүгә мөрәжәғәт итер кәрәк ине. Мәскәү рөхсәтенән тыш кәпәстәр тектерткәйнем — шелтә алдым. Ҡыҙыҡ, урманыбыҙҙағы төлкөгә лә хужа булып булманы...»

Һуңғы йылдарҙа Мәҙәниәт министрлығы «2005 йылға тиклем китапханалар селтәрен үҫтереү», «2005 йылға тиклем мәҙәниәттең һәм сәнғәттең үҫеше» кеүек программалар ҡабул итә. Үҙендә ниҙелер эшләп еткермәүенде йәки, киреһенсә, яҡшы эшләүеңде бары тик башҡалар менән сағыштырғанда ғына асыҡлап була бит. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы ла халыҡ-ара «СИОФФ» ойошмаһы менән хеҙмәттәшлек итә. Ошо хеҙмәттәшлек сәбәп булып, Гөлдәр Сабит ҡыҙы ла Америкаға, Германияға, Төркиәгә барып ҡайта. Юл хәтирәләре һәр саҡ көтөлмәгәнсә була бит. Гөлдәр Америкала Канаданан килгән фольклорсы ҡатынды ҡумыҙҙа уйнарға өйрәтә, үҙе менән йөрөткән ҡумыҙын бүләк итә, видеолентаға төшөрөлгән үҙебеҙҙең фольклор коллективтары сығыштарын күрһәтә. Германиянан тағы бер немканы ҡумыҙҙа уйнарға өйрәтеп китә. Икенсе йылына Швецияла үткән ошондай уҡ сараға мәҙәниәт министрының иҡтисад буйынса урынбаҫары Сажидә Тәлғәт ҡыҙы Ишмөхәмәтова бара, делегация исеменән төрлө илдән йыйылған фольклорсылар алдында сығыш яһай һәм телмәренең аҙағын: «Ҡумыҙҙа уйнап та күрһәтер инем, йәл, уйнай белмәйем», — тип тамамлай. Шул саҡ Канаданан килгән фольклорсы урынынан һикереп тора: «Булмаһа, уйнап күрһәтәйем». Ул теге йыл Гөлдәр өйрәтеп киткән ҡатын булып сыға.

Ошондай осрашыуҙар, аралашыуҙар яңы бәйләнештәргә юл аса. Беҙҙең фольклор ансамблдәренә күптән түгел Испания, Франция, Италия тамашасылары ла алҡышланы. «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән ҡанатлы фраза ла йәшәй бит әле. Бәлки кешелектең уртаҡ сәңгелдәген һәр халыҡтың хәтере тыуҙырған йырҙар, йолалар ҡурсалар? Унан һуң бит әле борон-борондан һәр халыҡ сит илдәргә илсе итеп үҙенең иң абруйлы кешеләрен ебәргән. Әгәр ҙә бөгөн беҙҙең сәнғәтте донъяның башҡа мөйөштәрендә Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова кеүек матур, мөләйем, ихлас, юғары күңелле кеше кәүҙәләндерә икән, быны инде республика етәкселегенең кадрҙар һайлауҙағы уңышы, тип ҡарарға кәрәктер...

Һәм, әлбиттә, Гөлдәр алдында офоҡтар киңәйгән һайын беҙгә, дуҫтарына, уның менән осрашыу, ултырҙаш булыу торған һайын һирәгерәк тәтей. Әммә былдай хәл мөмкин була ҡалһа, Гөлдәр ҡулына йәшел баянын ала. Бармаҡтары гармун телдәренә һаҡ ҡына ҡағылған ыңғайға, күңеленең иң түрендә ятҡан һәм Гөлдәрҙән бер ҡасан да айырылмаған моң бәреп сыға:

Уралҡайым минең, һин матурһың,
Ҡаяларың бигерәк һөйкөмлө.
Тыуған балаларын ҡосаҡлаған
Әсәләрҙең ҡуйыны шикелле.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы үҙе лә күптәр, бик күптәр өсөн сабыйҙарын ҡосағына алған Ер-әсә кеүек. Шуға күрә лә уның менән аҙ ғына ваҡыт булһа ла бергә эшләгән кеше уға булған рәхмәт һүҙҙәрен шиғырға йә йырға күсермәй ҡалмай торғандыр.

Болғансыҡлы заман алға елә,
Бирешмәйбеҙ ҡаршы елдәргә.
Донъя күптән нурға сумыр ине,
Күберәк булһа ерҙә Гөлдәрҙәр!

Был юлдарҙы уға Сафуан Әлибаев яҙған. Ә яҙылмағандары уны белгәндәрҙең, дуҫтарының күңеленә уйылған.